# АРАЛАР АЛЫҪ ТҮГЕЛ




*Ҡурған өлкәһенең Сафакүл районы төрлө милләт халыҡтары дуҫ йәшәгән матур төбәктәрҙең береһе. «Халыҡ бында 600-700 йылдар элек килеп ултырған һәм улар башҡорттар булған», — тип яҙа Сәфиулла Ғосман улы Иргизов, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, Сафакүл ауылының почетлы гражданы, ошо төбәктең сал тарихын тергеҙеүсе.*

*Сафакүл районы, Ҡурған өлкәһе хакимиәттәре һәм ҡурсалаусылар ярҙамында донъя күргән «Сафакүл районы тарихы биттәренән» тигән китап 2000 йылда баҫылып сыға һәм ул ошо райондың тарихы, халҡы, мәҙәниәте менән танышырға мөмкинлек бирә.*

*XVIII быуат аҙағында, йәғни 1782 йылдың йәйендә нигеҙ һалынған Сафакүл ауылына ике улы менән ер эҙләп килеп сыҡҡан Сафа Йомағолов нигеҙ һалған. Өс яҡтан һылыу ҡайындар менән уратылған матур күл буйына килеп туҡтаған улар. Күлде Сафа күле тип йөрөтә башлағандар. Бына шулай Сафакүл атамаһы тыуған. Берҙәм ғаилә булып йәшәгән Сафакүл районында 1989 йылғы халыҡ иҫәбен алыу буйынса бында 20 меңгә яҡын халыҡ йәшәп, шуның 40 проценттан күберәген башҡорттар тәшкил иткән. Әле лә үҙ телен, мәҙәниәтен ғәзиз күреп һаҡлаған кешеләр күп күрә был төбәктә.*

Башҡортостан Республикаһы менән Ҡурған өлкәһе араһында мәҙәни, әҙәби бәйләнештәр йылдан-йыл нығый бара.

Башҡортостандың яҙыусылары, артистары, табиптары Ҡурған өлкәһенең Сафакүл, Әлмән райондарында йыш була. Ҡурған өлкәһе вәкилдәре лә Башҡортостан Республикаһында көтөп алынған ҡунаҡтар.

23-25 майҙа ла башҡалабыҙ Өфөгә Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайының Ҡурған өлкәһе рәйесе, Сафакүл районы хакимиәте башлығы урынбаҫары Марс Закир улы Вәлиев етәкселегендә делегация булып килтте. Уның составында рай-



08-2001.p65 89 21.08.01, 11:22
Black

он дауаханаһының баш табибы Мәхмүт Ғәли улы Ғиниәтов та бар ине.

Делегацияның Өфөгә килеүенең маҡсаты:

1. Өфө күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институты менән 2001 йылға хеҙмәттәшлек тураһында договор төҙөү.

2. Башҡортостан Республикаһы хөкүмәтенән Ҡурған өлкәһенең мәктәп тамамлаусылары өсөн республика юғары уҡыу йорттарына квоталар юллау.

3. Башҡортостан Республикаһы халыҡ мәғарифы министрлығынан Сафакүл районының Аҙнаҡай мәктәбенә ярҙам һорау.

Ошо маҡсаттар нигеҙендә Өфө күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институтында уның директоры Марат Тәлғәт улы Аҙнабаев менән осрашыу булып үтте һәм ағымдағы йылдың июль айында институт табиптарының районға килеүе хаҡында килешеүгә өлгәшелде. Әйткәндәй, был институт ғалимдарының Ҡурған өлкәһенә бишенсе тапҡыр барыуы.

Артабан Башҡортостан Республикаһының Министрҙар Кабинетында Премьер-министр урынбаҫары Хәләф Хәлфетдин улы Ишморатов менән осрашыу булды. Унда быйыл Сафакүл районы мәктәптәрен тамамлаусыларға Башҡортостандың юғары һәм урта махсус уҡыу йорттарына уҡырға инеүҙә ярҙам күрһәтеү хаҡында һөйләшеү барҙы.

Уҙған йылдарҙағы кеүек быйыл да педколледждарға, гимназияларға квота урындары бүленәсәк. Шуны ла әйтеп үтергә кәрәк, әлеге көндә Башҡортостанда был төбәктән 50 кеше белем ала. Артабан уҡыусыларҙың йәйге ялын ойоштороу йәһәтен дә Ҡурған өлкәһендә йәшәүсе милләттәштәребеҙгә ярҙам күрһәтеү тураһында килешеүгә өлгәшелде. Әйткәндәй, бынан бер нисә йыл элек Сафакүл районынан 20 бала Шишмә районында ял итеп ҡайтҡайны.

Делегация етәксеһе М.З.Вәлиев әйтеүенсә, ике төбәк араһында бәйләнеш көндән-көн нығый. Ҡурған өлкәһенә даими рәүештә методик һәм нәфис әҙәбиәт ебәрелә. Март айында ғына 100 мең һумлыҡ әҙәбиәт алынған. Шулай уҡ март айында Мәҙәниәт министрлығы «Ҡурған өлкәһендә башҡорт мәҙәниәтен үҫтереүҙең перспективалары» тигән темаға семинар ойоштторҙо. Делегация ағзалары бер аҙна буйы уҡыусыларға, йәштәргә бейеүҙәр, башҡорт йырҙарын өйрәтте, бер-нисә концерт бирҙе.

Халыҡ мәғарифы буйынса эштәр көйлө бара. Әлмән һәм Сафакүл районы мәктәптәре базаһында үткән «Башҡорт теле уҡытыуҙың заманса алымдары» тигән фәнни-ғәмәли конференция сиктәрендә Башҡортостан мәктәптәренең гимназия уҡытыусылары асыҡ дәрестәр бирҙе, докладтар менән сығыш яһаны.

Ҡурған өлкәһе халҡы республикабыҙ хөкүмәтенә, Президент Мортаза Рәхимовҡа даими ярҙам күрһәткән өсөн сикһеҙ рәхмәтле. Мәҫәлән, Сафакүл районына күрһәтелгән ҙур ярҙам — ризограф (мини-типография) ярҙамында хәҙер «Замандаш» тигән айлыҡ гәзит сыға һәм 10,5 мең тираж менән бөтә өлкәгә таратыла.

Ҡыҫҡаһы, дуҫлыҡ һәм ярҙам күрһәтеүҙең киләсәктә тағы ла нығыясағына шик юҡ.

*Зөһрә Алтынбаева.*



08-2001.p65 90 21.08.01, 11:22
Black